## Уҡыусыма юлайҡан һүҙ

*Үҙ ғүмеремдә байтаҡ ҡына бейек ҡоймалы ҡапҡаларға шаҡырға, ауыр-ауыр ишектәрҙе асып инергә тура килде. Уларҙың һәр береһе үҙенең ниндәйҙер серле үҙенсәлеге менән хәтерҙә ҡалған: бәғзе ҡапҡаларҙы асҡанда үҙемдең асырға хаҡлығымды тойҙом, ә ҡайһы берҙәренән кәмһенеү, түбәнһенеү, хатта ғәрләнеү тойғоһо кисереп киткеләнем. Ҡапҡалар хужаның — холоҡ-ҡылығын, ишектәр йорт эйәһенең тауышын белгерткәнен тойомланым. Ә иң мөһиме — үҙ тыуған еремдәге ҡапҡаларҙың мөләйемлегенә, яҡынлығына бер ни ҙә етмәгәнлегенә инандым. Уларҙы асып ингәндә: “Эй, Илаһым, ожмах ҡапҡаһы тигәндәре ошолай булалыр инде!..” — тигәнерәк хис-тойғо күңелемде йылытты.*

*Шул ҡапҡаларҙан фатиха алып сыҡҡанда йә һағынып ҡайтып ингәндә атайҙарҙан ҡалған утлы кисеүҙәрҙе кисергә лә тура килде, олатайҙарыбыҙ ҡороп ҡалдырған аҡ тирмәләрҙең ебәктәй еңел ишектәрен асып инеп, түрендә аяҡ бөкләп ултырыу бәхетен татыған татлы мәлдәр ҙә онотолмай.*

*Һиндә лә ошондай илаһи тойғолар уятыр ҡапҡаларҙы йышыраҡ асырға саҡырам, ҡәҙерле уҡыусым!*

*Автор.*



# Ожмах ҡапҡаһы

Поэма

1

Ғүмер буйы кеше
ҡапҡа аса,
Күпме йыр бар ҡапҡа турында.
Был ҡапҡаны хәҙер
мин асмаһам,
Үлән үҫер килгән юлымда.

Был ҡапҡаны
мин асырға тейеш!
Яҙыҡ булыр, әгәр асмаһам.
Асылмаған ҡапҡа —
мәңгелек сер,
Бер сер кәмер ерҙә, исмаһам.

Асам, тим дә...
Алдан һайрайыммы?
Ҡапҡаны бит кәрәк ҡорорға!
Ҡапҡа ҡороу —
ҡапҡан ҡороу түгел,
Башты ташҡа тейеш орорға!
Күҙ — ҡурҡаҡтыр,
Ҡул улай ҙа — батыр,
Тик ҡул менән ҡапҡа эшләнмәй.
Ҡапҡа — хыял, илһам,
ижад уты:
Йөрәк янмай,
Ең һыҙғанмай
Ризыҡ та бит хатта тешләнмәй!

Ҡ а п ҡ а
тигән исем күтәреп тә,
Семәрҙәрен сөйөп күктәргә,
Инмәй китһә әҙәм, йәне көйөп,
Ояттарын ҡала йөкмәргә!
Асып инеп,
Аҡланмаһа өмөт,
Яҡланмаһа күңел ташыуы,
Уянмаһа ҡабат килеү уйы,
Ни хәжәттер ҡапҡа асыуың?!

Әҙәм өсөн
фани донъяларҙа
Берәү генә Намыҫ ишеге.
Оятһыҙҙар иһә
шаҡып тормай
Инеп китә, табып тишеген.

“О, бында ни — йәннәт!” —
тиһәләр ҙә,
Осратманым, эҙләп тапманым.
Баҡый йортта —
Раббы хозурында —
Берәү, тиҙәр,
Ожмах ҡапҡаһын.

Ә был ҡапҡа... түгел ябайҙарҙан,
Серен тарихтарҙан юлланым!
Был ҡапҡанан ингән
Һис үкенмәҫ —
Китер күңел күге нурланып!

Әҙәм балаһына тура килмәй
Ниндәй генә ҡапҡа асырға!
Изге ниәт — асҡыс булыр ҙа ул,
Килмәһен тик ташлап ҡасырға.

Үҙ-үҙеңдән ҡасып булмағандай,
Ҡаса алмай бәндә яҙмыштан,
Рентген аша үтеү менән берҙер
Яҙмыш ҡапҡаһынан уҙмыш та.

Ел ҡапҡанан —
Баҫыу ҡапҡаһына,
Ауыл ҡапҡаһынан —
Киңлеккә!..
Ираклелек арбай кешеләрҙе,
Мөрхәтһенмәй бер иш тиңлеккә.

Ә ireклек тойоу
Ҡапҡаларҙың
Була икән ҡайһы яғында?
Күрәҙәләй алдан белһәң икән —
Нимә көтә ҡапҡа артында?

Донъя бит ул —
Ир ҙә килеп шаҡыр
Ғүмерҙә күрмәгән ҡапҡаһын.
Ат баҫыр, ти, баҫмаҫ һуҡмағына,
Ир асыр, ти, офоҡ япмаһын.
Донъя бит ул —
Антын боҙһа ла ир,
Асыр асмам тигән ишеген.
Күрмәһәм дә үкенмәҫмен, тигән
Тура килер күреү кешеһен.

Донъя бит ул —
Еймәм тигән ашыңды ейҙерер,
Эймәм тигән башың эйҙерер.
Бөгөнгө был беҙҙең болғаҡ заман
Кеймәҫ ерҙән битлек кейҙерер...

Өйрәттеләр беҙгә
(Уҡыталар һаман!)
Боронғо Рим, грек тарихын.
Үҙебеҙҙең тарих — кипкән арыҡ,
Үҙәнен ләм баҫҡан ахыры.

Ата-бабам гиҙеп күп йөрөгән
Урал менән Алтай араһын.
Мең ҡатнаған!
Әммә ҡайҙа ҡалған
Башҡорт эҙе, башҡорт тарихы?..

Рәхмәт, Хоҙай, шөкөр, тимен,
Халҡым
Хәтер һандығының төбөндә
Һаҡлағанға
Ҡобайыры, моңо
Килеп еткәненә бөгөнгә!

Һаҡлай алмағандыр баҫҡындарҙан
Ҡапҡаларын,
Арҡайымдай ҡәлғә-ҡалаһын,
Әммә йөрөткән ул йөрәгендә
Уралын, ҡылғанлы далаһын.

Булған уға йорт та,
Тимерлек тә
Төтәгәндәй
Күгәрепкәй ятҡан Уралы, —
Бишеге лә,
Инер ишеге лә,
Хоҙай бүләк иткән ҡорамы!..

2

Клеопатра ҡапҡаһынан үтәм.
Иҫ-аҡылым китә —
Ни ғүмер
Шунан аға Ваҡыт ташҡындары,
Ә ҡымшанмай таштың бер ере!

Ҡапҡа асыҡ,
Баҡһаң, ингәнгә лә,
Сыҡҡанға ла икән ихтыяр.
Боронғолоғоңа баш эйәм дә,
Ҡиәфәтең генә ихтираз.

Ҡапҡа асыҡ —
Теләгән бер юлсы
Унан үтә сыға, тик инмәй.

Ә мин индем,
Клеопатра, һинең
Быуатыңа баш та тигеҙмәй!

Ә ҡапҡаһы бейек!
Унан уҙған
Ике тәгәрмәсле арбалар,
Алтын-көмөш,
Ҡорал, шарап, буҫтау...
Юлбаҫарҙы күпме арбаған!

Бер уйлаһаң,
Нимәгә ул бөгөн
Иҫкереп үк бөткән таш ҡапҡа?
Хәҙер инде ул ҡапҡа ла түгел, —
Ерҙән сығып торған Таш Алҡа.

Күҙ ҡыҙырлыҡ нимәһе бар инде,
Исеменән башҡа ҡапҡаның?
Иҫтәлеккә шунда берәй ташын
Йә һүрәтен алып ҡайтмаһаң?..

Бөткәнме ни ерҙә
Даны сыҡҡан
Һәйкәл булыр шанлы ҡапҡалар?!
"Алтын Урҙа ҡапҡаһы",
"Тамерлан ҡапҡаһы",
"Бранденбург ҡапҡалары"...
Хәйер, улары ла
Иҙеү төҫө булып ҡалҡҡандар.

Ҡапҡа төҙөткәнгә генәме ни
Клеопатра ҡалған тарихта!?
Ул бит Мысыр батшабикәһе лә,
Егерме бер йыл торған тәхеттә.

Йүнле батша булмағандыр ҡатын,
Беҙ хөкөмсө түгел үткәнгә.
Уйнашлығы менән сыҡҡан даны,
Мысырҙы ла биргән римдәргә.

Хәлле илде ташлап китәләрме,
Яманаты ҡайҙа таралған?!
"Мысыр хәйерсеһе" тигән йолҡош
Беҙгә килеп еткән — Уралға.

Клеопатра — сая грек ҡыҙы...
Мысырҙы ла киткән буш итеп.
Ҡотолған ул халыҡ нәфрәтенән
Ағыу эсеп — үҙен юҡ итеп.

Сәскә-батша шиңгән.
Ҡалған унан
Тарсус шәһәрендә ҡапҡаһы,
Ғәрләнгәндәй тора исеменән —
Һауытына күрә ҡапҡасы.

Һай замандар!..
Хаким — томаналыҡ!
Унан уҙып йола боҙмаҫҡа!
Ҡапҡа — муллыҡ,
Көс-ҡеүәт тамғаһы,
Ҡапҡанан юл — тура ожмахҡа!..

3

Ҡапҡаларҙың булмаҫ ниндәйҙәре!
Алтын көплө, көмөш семәрле...
Ижад бәйгеһендә өҫкә сыға
Атаһынан отҡан һөнәрле.

Һәр береһе хыял осошонан
Һоҡланырлыҡ әҫәр тыуҙырған,
Таштар нурҙа уйнай,
Тимер йырлай,
Ағас бөтәһенән уҙҙырған:
Төҫтән, нурҙан, моңдан ырылған...

Бына шундай ине олатайымдың
Ауылымда "Ожмах ҡапҡаһы", —
Ҡорал эшләй — ир маҡтана, тиҙәр,
Ә ул
Зиһен, дәртен, зауҡын бит һалған!

Рәхмәтулла ихлас оҫталаған,
Семәрләгән, юнған, һырлаған,
Ҡапҡа тере йәндәй күкрәк киргән,
Бар урамға, гүйә, йырлаған.

Сәмситдин бай ҡалған бик ҡәнәғәт,
Һыҡмырланмай биргән әжерен.
Рәхмәтулла белгән үҙ баһаһын,
Ебәргәндәй түгел ҡәҙерен:
— Былдай ҡапҡа — тик ожмахта ғына!..
Хуп мәйеле, һеҙгә ярағас.
Ике йөҙ йыл торор әле ҡапҡаң —
Ҡаты ағас бит ул ҡарағас!
Эсе тулы сайыр, ҡараһаң...

Берәү һорар: "Байҙың ҡапҡаһына
Ҡайҙан килгән ағас далаға?"
Әйтмәү яҙыҡ булыр балаға:
Йортҡа ғына түгел, ҡапҡаға ла
Ирәндекте байҙар талаған...

Бик оҡшаған ҡапҡа Сәмси байға,
Оҡшау ғынамы һуң — һөйөнгән!
Ҡапҡа — урам йөҙө генә түгел,
Ҡапҡа — йөҙөк ҡашы өйөнә!

Ҡапҡа асыу йолаһы ла үткән
(Таҫма киҫеү генә булмаған!),
Ауыл халҡы килгән эркелеп,
Сәмситдин бай:
— Ауылдаштар! — тигән
Берсә көлөп, берсә иркәләп:
— Ҡапҡа бер ҙур мөлкәт булмаһа ла,
Йыйҙым, асайыҡ тип бергәләп;
Рәхмәт ҡорҙаш “Ожмах ҡапҡаһы”, ти,
Бары менән — байрам...
Ингеләп
Йөрөгөҙ шул, эйе, ҡапҡа бикһеҙ,
Ожмах булмаһа ла, һорағыҙ,
Хәлсә ярҙам булыр.
Донъяларҙы
Именлеккә генә юрайыҡ...
Ҡорбанғәле, Өммөниса ҡыҙым,
Асығыҙсы бергә ҡапҡаны,
Ағай-эне, әйҙә, ихатаға...
Шунан арыу һүҙ ҙә тапмамын.
Ҡорбан салдым,
Аш та өлгөргәндер.
Еңгәйегеҙ көтөп арыны.
Төш тә етте, эйе, күбегеҙҙең
Өлгөргәндер асығып ҡарыны...

Күрше ауылдарҙа бының ише
Бейек “урыҫ ҡапҡа” бик һирәк.
Булғандарының да “атаһы” шул
Рәхмәтулла оҫта — ник кәрәк?!

Эше бөткәс, оҫта әйткән, имеш:
“Хикмәт түгел бында ҡапҡала,
Сәмси бай донъяһы — йәннәт түре,
Хикмәт — Хоҙай йәйгән япмала!”

Шулай тимәй, оҫта нимә тиһен —
Хужа уны көн дә һыйлағас,
“Сәмси һаран түгел, йомарт”, —
тигән
Исемем сыҡһын, тиеп уйлағас.

Шулаймылыр, бүтәнсәме икән
Рәхмәтулла исем таҡҡаны,
Мәгәр, Сәмси байҙың ҡапҡаһына
Йәбешеп ҡалған —
“Ожмах ҡапҡаһы”.

Шул йәннәткә бер тейенер өсөн
Асыр кәрәк ауыр ҡапҡаны.
Бай ағайың, байбисә еңгәсәй
Ҡарап торған кемдең асҡанын.

Һай замандар!..
Хөкөм — көслөнөкө!
Унан тәүҙә алға уҙмаҫҡа!
Ҡапҡа — муллыҡ,
көс-ҡеүәт тамғаһы,
Ҡапҡанан юл — тура ожмахҡа!..

* * *

Илдә дауыл ҡупҡан.
Ә Сәмситдин
Ҡапҡа ҡороп әллә отолған?
Тотмаһа ла өйҙә бер ялсы ла,
“Синфи дошман” тиеп тотолған.

Ауылдашы Ғиләж конвой менән
Килгән таңдан ҡулға алырға,
Бойороҡ биргән бик тиҙ йыйынырға,
Волость үҙәгенә барырға:

— Көнөң килде, Сәмситдин бай,
Һөргөнгә түгел, ожмахҡа!
Иҫкәртәм: һис ҡарышмаҫҡа,
Юлда ла тәртип боҙмаҫҡа!..

Сәмситдин бай,
Тотмаһа ла һис бер яуыз ниәт,
Эш былайға инде олғашҡас,
Ҡосаҡлаған ҡапҡа бағанаһын,
Усы менән һыйпап хушлашҡан...

Белһәләр ҙә уның
Мал-тыуарҙы
Хәләл көсө менән тапҡанын,
Себерҙәргә һөрөп ебәргәндәр...
Илап ҡалған “Ожмах ҡапҡаһы”.

Күтәрмәле йорто, бар мөлкәте
Хеҙмәт иткән яңы хужаға.
Әммә яңы дәүерҙә лә ауыл
Мәңге сыға алмай нужанан.
(Нужаларҙан һаман бушамай!)

4

Төшөмдә мин күрҙем
Ул ҡапҡаны
(Төшкә инә таныш нәмәләр),
Тик мин күрҙем — ҡала ҡапҡаһы тип,
Бер аҙ юғарыраҡ кимәлдә.

Ҡала үҙе — Таналыҡ ярында,
Нәҡ ҡашлаҡта, кисеү эргәлә,
Ә бөгөлдә, саҡ ҡына арыраҡ,
Теҙелгәндәр өйҙәр бергәрәк.

Йорттар бейек түгел,
Таш ҡоймалы,
Түбәләре — ҡамыш япмалы;
Күркәм өйҙәр күргәҙмәлә кеүек!
Иң матуры — ҡала ҡапҡаһы!

Ишек алдарында — усаҡлыҡтар,
Ҡайнай эркет, һарҡа йәш ҡорот;
Мурҙа үрә ҡарттар,
Ә малайҙар
Арҡан ишә — оҙон сүс ҡороҡ...

Ҡатындар ҡаҡ ҡоя,
Йәш килендәр
Ҡиптерәләр балыҡ, ҡаҡлай ҡаҙ;
Уйнай ҡыҙҙар йәшел сирәмлектә,
Бергә бәпкәләрҙе һаҡлайҙар...

Сәйен ҡуя әсәй өтәләнеп,
Ҡөбөһөндә бешә ҡымыҙын...
Ауыл моңон, ғәзиз тауыштарҙы
Һис кенә лә килмәй тымыҙғы...

Күргәйнем шул төштө өндәгеләй,
Һөйләп бөтөүҙәрем икеле.

Бына хәҙер иҫкә төшә шул төш
Бөрйәндәге мираж шикелле.

Берсә — таныш,
Берсә — ят бер ҡала.
Баҙармы ни — халыҡ гөж килә.
Ҡапҡа тышына уҡ эркелделәр...
“Нимә булған?” — тиеп инәлһәм дә,
Өндәшмәйҙәр...
Уф, төш, төш кенә!

Ошо төштө аҙаҡ бер дуҫыма
Һөйләнем мин: “Күрҙем ҡала”, — тип,
Минең тыуған яҡҡа ул ҡунаҡҡа
Ҡилгән ине, күрәм дала, тип.

“Һин уны яҙ! — кәңәш итте дуҫым, —
Яҙһаң, булыр еңел үҙеңә.
Төштәреңә ингәс, далаң сарсай
Шифа ямғыр кеүек һүҙеңә...”

Юрамайым,
Ауылым яҙмышҡайы
Һыйған әллә шул төш йөгөнә:
“Ҡала” сағы — уның данлы сағы,
Бөлгөнлөгө — уның бөгөнө.

Ике дәүергә лә ҡапҡа шаһит,
Асылған ул ике заманға.
Теле генә юҡ шул — һөйләр ине!
Һөйләр кеүек алда һаман да!..

Ҡилде хәҙер ҡырғын ҡимміттәргә —
Ҡәберлектә уның урыны.
Әйтерһең дә,
Ҡапҡаһын да Ҡеше
Ерләп ҡайтҡан:
“Әйҙә ҡороһон!..”

* * *

Ҡемдең башы етеп,
Был ҡапҡаның
Һуңғы бағанаһын... зыяратҡа
Илтеп ҡуйған
Ҡапҡа-баҡан итеп!?
Асылда юл бирәү: сиратҡа —
Сират күперенә юл ошонда,

Ошо ҡапҡа аша үтергә;
Ауылдаштар башта
                    был ҡапҡанан
Оҙата теге һынау-күпергә.

Миңә ҡалһа, бында ятҡандарҙың
Һәр береһе уҙған ожмахҡа!

Ҡендек ҡаны тамған
изге ергә
Тоғро ҡалды антын боҙмаҫҡа.

Зыяратта минең замандаштар,
Яҡындарым, ҡай бер ҡорҙаштар.
Күңелдәре — дала кеүек ине...
Баҡыйлыҡта улар — йортташтар.

Ябай һөнәр кешеләре ине,
Ер кешеһе — ауылдаштарым,
Йәннәткә лә, тамуҡҡа ла берҙәй
Сайҡап ҡына ҡуйыр баштарын.

Иген сәсеп-игеп, бағып малын,
Донъя көттө улар иренмәй,
Тормошҡа ла булды үҙ ҡарашлы,
Хыялға ла бигүк бирелмәй.

Ғүмерҙәрҙең белеп фанилығын,
Йәшәү ҡырыҫ, тимәй, һүрелмәй,
Күңел асырға ла яраттылар,
Тойғо-хиҫкә артыҡ бирелмәй.

Үҙ ҡиблаһы — ҡибла, үҙ иҫәбе,
Ышаныслы хәләл тапҡаны.
Береһенең дә иҫе китмәгәндер
Аса алмам, тип, Ожмах ҡапҡаһын...

Зыярат ҙур: барыһы ла уның
Ҡосағында тыныс йоҡлаған.
Мин күрмәгән боронғолар ҙа бар —
Мин тыумаҫтан алда йоҡлаған.

Ҡисерһендәр улар мине берүк,
Һаҡһыҙ иҫкә алып борсоһам,
Исемдәре кәрәк тереләргә,
Тарихта ла килеп бер сыға...

Йәннәткә бит илтә бөтә юлдар,
Күңелеңдә янһа изге ут,
Ғүмереңде әгәр халҡың өсөн
Йәлләмәгән булһаң һис ваҡыт,
Үтерһең дә Ожмах ҡапҡаһынан,
Яҡташтарың үткән шикелле.
Бер ҡатлыраҡ, ябай ер кешеһе
Инмәй ҡалыуҙары икеле...

Ғүмерҙә лә белмәнеләр улар
Ерҙә Ҡлеопатра ҡапҡаһын.
Уларға ни һинең Ҡлеопатраң —
Самауырға ҡомған ҡапҡасы!

Ә бит күрҙе улар көндә-төндә
Үҙҙәрендә "Ожмах ҡапҡаһын",
Оҫта ҡуллы, ипле Рәхмәт ҡарттан
Һәйкәл кеүек тороп ҡалғанын.

Ябай уй менән дә төшөндөләр
Ҡапҡа "серен", ҡапҡа "асҡысын" —
Аҡ ниәттән, саф күңелдән генә
Йәннәттәргә юлдың таҡырын...

Һәр береһе сабыр холҡо менән
Гүргә инеп тынлыҡ тапҡаны,
Инсаф, йомшаҡ күңелдәре менән
Үткәндәрҙер Ожмах ҡапҡаһын.

5

Поэмамдың инде исеме лә
Түгел "Ҡлеопатра ҡапҡаһы".
Ят исемде, әллә нимә күреп,
Йөрөгәнмен башта алданып.

Ҡлеопатра һылыу үҙе лә бит
Күпме ир-егетте аҙҙырған,
Әйләндереп башын ғишыҡ менән,
Күпмеләрен юлдан яҙҙырған.

Ғәйепләү юҡ.
Хәҙер инде нимә?
Тарих шаһит.
Ҡиәмәт алдында
Гонаһ ҡылғаны ла, сауаплыһы —
Бер тигеҙҙән һөал алына.

Рәхмәт Ҡлеопатра ҡапҡаһына —
Уйға һалды мине.
Хәтергә
Ҡилде әллә күпме яҡташтарым,
Ғүмерҙәре
Зая микән? — Түгел әйтергә.

Аяныслы хәл был,
Әммә Хаҡлыҡ
Әсе булғанда ла — юғары.
Хәҡиҡәт — ул өҫтөн туғанлыҡтан,
Хаҡлыҡ ҡалмай ерҙә юғалып.

Зыярат ҡапҡаһынан һуңғы осор
Әллә нисәүегеҙ үтте бит,
Һеҙҙе юҡлап,
ҡәҙерле әсәйҙәр,
һөйөклө ҡатындар,
ғәзиз балалар
Утлы күҙ йәштәрен түкте бит!

Ниңә шулай ашыҡтығыҙ икән
Яҡты донъяларҙан китергә?
Бәлки, күбегеҙгә шешәбикә
Ярҙам иткән ярҙан этергә?..

Хәҙер инде кемде ғәйепләйһең,
Ер убылған, хәтер юйылған,
Тимерҙән йә таштан иҫтәлектәр
Ҡуйылаһы инде ҡуйылған...

Йәндәрегеҙ, тинем, йәннәттәлер,
Һеҙ гел азаматтар булғанға!
Ожмах юраным да...
Ә уйланһаң? —
Хәмер менән бик дуҫ булғандарға
Тамуҡ уты әҙер торған да!..

Ә шулай ҙа аҡларға ла итәм,
Яҡларға ла Хисап көнөндә —
Үлсәүҙәргә унда килеп ята
Бар ҡылғаны ерҙә — өнөндә.

Таяҡтың иң һәлмәк башы бында
Йәмғиәткә тейеш төшөргә.
Ил хатаһын ул хатаһы итеп
Күпме инде арҡан ишергә?!

Бары шуға һеҙҙе аҡлаймын да,
Аңлаймын да кеүек, ағайҙар...
Ҡәберҙәрҙә һеҙҙең шау сәскәләр
Ғәфү үтенгәндәй ҡарайҙар.

* * *

Әҙәм балаһы ни тыуғанында
Тоймай — ниндәй булыр булмышы:
Йәшәйме ул изге ниәт менән,
Йәшнәй нәфрәтенән тулышып?
Белмәй әҙәм — ул кем булырын...

Күңелдәре асыҡ-ярыҡтарҙан
Бүтәндәргә шойҡан аҙ тейә,
Эсендәге гел тышында була,
Илтә улар шәфҡәт, наҙ тейәп.

Ҡапҡалар ҙа шулай, —
Кеше кеүек,
Белмәй ниндәй яҙмыш көткәнен:
Аса уны кеше,
Йәнә яба;
Ҡапҡа белмәй ниҙәр үткәнен
Үҙе аша:
Бәхет-ҡот инәме,
Сыға микән әллә әр-золом?
Әллә инә арба-арба байлыҡ,
Әллә китә ситкә ил боло?..

Бикле бейек ҡапҡа арттарында
Енәйәттәр, гонаһ ҡылына,
Шунда шытҡан шомло уй-ниәттән
Ерҙә күпме ғүмер ҡыйыла?..

Кеше ҡулы менән асыла ла
Ҡайғы-зарға йәнә юл аса.
Кеше ҡулы менән ябыла ла
Бәхеткә лә бер үк юл яба...

Ҡапҡаларҙың оҡшаш яҙмыштары —
Өҫтөнлөк һәм байлыҡ билдәһе.
Улар бары белмәй хужаһынан
Ниндәй әмер-хөкөм килгәнен.

Ә ул хөкөм килә —
Иртә-һуңмы,
Һәр ғәмәлдең була аҙағы.
Ҡапҡалар ҙа ауа,
Тәне талғас,
Һынғас һуңғы тутыҡ ҡаҙағы...

Йәлләйем мин,
Ҡапҡа,
яҙмышыңды,
Тик хәлеңә керә алмайым,
Тарихыңа инә алам да бит,
Тик үҙгәртә генә алмайым.

Яҡын миңә һеҙҙең булмыштар ҙа,
Быуат-быуат торған ҡапҡалар!
Асылығыҙ ғына асыҡ ҡалһын,
Ел-дауылдар ҡаты япһа ла...

Ҡайҙа, ниндәй ауыр ҡапҡаларҙы
Асһам да мин,
Берәй мәл еткәс,
Ауылдағы яңы башҡорттарҙың
Ҡоттедж, вилла, дача ҡапҡаларын
Асып инергә лә хәл етмәç...

Ҡапҡаларға ҡаға ил һулышы,
Ҡапҡаларға һеңә ғәҙәттәр,
Хужалары ниндәй —
Ҡапҡа шундай,
Инһен эскә иман-әҙәптәр.

Күңелдәрҙәй ҡапҡа асыҡ булһын,
Еләç елдәр унан ағылһын.
Өйөгөҙ шат булһын,
Ҡапҡағыҙҙа
Һеҙҙең паҡлыҡ, сафлыҡ сағылһын!

## Аҙаҡҡы һүҙ

Ғүмер етмәç
Барлыҡ ҡапҡаларҙы
Асып бөтөрөргә юлында.
Ҡай береһен аса алмаçһың да —
Тылсым асҡысы юҡ ҡулыңда.

Һүҙ тылсымы менән ишектәрҙе
Әүлиәләр асҡан замандар
Артта ҡалды —
Бөгөн беҙҙең быуын
Туплы компьютерлы наҙандар!

Әүлиәләр!
Юллайымсы һеҙгә
Оло рәхмәт форсат тыуғанда,
Асҡанһығыҙ бикле ҡапҡаларҙы,
Томаналыҡ аңды быуғанда.

Тылсым көсө һеҙҙең —
Ғилем, зиһен,
Сихри серен сисеү ғәмәлдең;
Ҡеше ерҙә — уйлы күҙәнәге
Сикһеҙ, тиңһеҙ Олуғ Ғәләмдең.

Ожмах ҡапҡаһына юлдар бары
Изгелектәр аша һалына,
Ҡыл яҡшылыҡ,
Ит изгелек —
Шулар
Рөхсәт ҡағыҙына яҙыла.

Изгелек ул — йылы һүҙ ҙә,
Сауап,
Яҡыныңа ярҙам, ярлыҡау;
Өләшкәндән хәйер, хәләл ризыҡ,
Ҡасыр харам,
Һүтелер барлыҡ ау...

Изгелектәр ерҙә эшләп ҡал да
Баһаларын көтмә — һыуға һал,
Халыҡ менән балыҡ күрмәй икән,
Ҡалҡыр балҡып хас та тулған ай!

Ожмахҡа тип кеше, эй, йән атҡан,
Эләгергә унда ҡыялған.
Асылда бит ожмах... фантазия!
Ҡалһын мәңге шулай хыялда.

Ожмахты һуң беҙҙә кемдәр күргән,
Унан ҡайтып кемдәр һөйләгән?
Буяуҙарҙы йәлләмәйсә биҙәп,
Матур көйгә кемдәр көйләгән?

Һуң, ожмах бит беҙҙең үҙебеҙҙә —
Тәңре бүләк иткән еребеҙҙә:
Урман, дала, йылға, туғайҙар...
Сал Уралҡай, ана, күккә ашҡан!
Йәшәү йәмен данлай ҡурайҙар...

Бер кемгә лә зыян эшләмәгән
Күңелебеҙ — ожмах ҡапҡаһы!
Сыҡһын унан бары яҡшылыҡтар —
Башҡортомдоң тоғро ҡалҡаны!

2015